

*Рәшиҙә Искәндәр ҡыҙы Солтанова — талантлы шәхестәр биргән Учалы ерендә тыуып үҫкән. Йәштән үк тырыш һәм әүҙем булыуы уны Башҡортостан йәштәренең алдынғы вәкиле итә.*

*Оҙаҡ йылдар ВЛКСМ-дың Башҡортостан Өлкә комитетында мәктәп йәштәре бүлеген етәкләй, Мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре профсоюзы өлкә комитеты рәйесе итеп һайлана. 1985-1991 йылдарҙа КПСС-тың Киров район комитеты секретары вазифаһын атҡара. 1993-1999 йылдарҙа — Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинеты эштәре идаралығының социаль-гуманитар бүлеге мөдире. 1999 йылдан — Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинетының Граждандар хәле актарын теркәү (ЗАГС) идаралығы начальнигы. Рәшиҙә Солтанова — Башҡортостан Республикаһының ҡатын-ҡыҙҙар союзы рәйесе, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Һеҙҙең иғтибарға Р.И.Солтанова менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.*

— *Тәүҙә идаралыҡ менән таныштырып үтһәгеҙ ине.*

— Идаралыҡҡа абруйлы ла, яуаплы ла бурыстар йөкмәтелгән. Беҙҙә никах, бала тыуыуы, айырылышыу, исем алмаштырыу, балалыҡҡа алыу, баланың атаһын билдәләү, үлем осраҡтары теркәлә.

Кеше тормошондағы был мөһим ваҡиғаларҙың үтә әһәмиәтле булыуын хөкүмәтебеҙ, Президентыбыҙ даими күҙ уңында тота. Әйтәйек, 2000 йылдың мартында Башҡортостан Республикаһында Граждандар хәле актарын теркәү (ЗАГС) идаралығы эшмәкәрлеген камиллаштырыу тураһында махсус Указ ҡабул ителде. Уның төп маҡсаты — граждандар хәле актарын теркәү буйынса дәүләт сәйәсәтен тормошҡа ашырыу һәм ошо органдарҙың эшмәкәрлеге өсөн тейешле шарттар булдырыу. Указ нигеҙендә загс органдарының эшенә иғтибар бермәбер артты. Күпселек ҡала һәм район загс бүлектәрендә компьютерҙар, аудио- һәм видеоаппаратура, тейешле костюмдар, төрлө йола атрибуттары булдырылған. Ҡала һәм район хакимиәттәре башлыҡтары ла загс органдарының матди базаһын нығытыуға иғтибарҙы көсәйтте.

Был ыңғайҙан мин 2000 йылдың май айында Йылайырҙа асылған Никах йортон билдәләп үтер инем. Ул 110 квадрат метр майҙанды биләй, заманса талаптарға яраҡлы итеп йыһазландырылған. 2000 йылда бында 30 йәш ғаиләнең никахы теркәлгән, 217 балаға тыуыу тураһында таныҡлыҡ тапшырылған. Бәпестәрҙән ике игеҙәк, өс игеҙәк тә бар. Никах йортонда абруйлы ла, яуаплы ла бурысты үҙ эшенә мөкиббән бирелгән ханым — Сидиҡа Мөхәмәҙи ҡыҙы Рәмова атҡара. Сибай, Стәрлетамаҡ, Октябрьский, Дәүләкән ҡалалары, Бүздәк, Илеш райондарының граждандар хәле актарын теркәү бүлектәре лә заман һулышын тойоп йәшәй, йәш ғаиләләргә, әсәләргә хәлдән килгәнсә ярҙам күрһәтергә ынтыла.

Идаралыҡтың, загс бүлектәренең эше граждандар хәле актарын теркәү менән генә сикләнмәй, башҡа бик күп мәсьәләләрҙе хәл итергә тура килә. Беҙҙә 20 миллиондан ашыу ар-

хив материалдары тупланған, улар 75 йыл һаҡланырға тейеш. Был документтар араһында төрлө йылдарҙағы граждандыҡ акттары менән бергә 20-30-сы йылдарҙа латин алфавиты нигеҙендә яҙылғандары, мәсет һәм сиркәү кенәгәләре, матур-матур исемдәр теҙмәһе, ырыуҙар тарихын, шәжәрәләрҙе асыҡлау буйынса мәғлүмәттәр бар.

1937 йылғы шәхес культы осорондағы һәләкәтле яҙмыштарҙы асыҡлауҙа ла ярҙам күрһәтәбеҙ.

— *Беҙҙең журнал уҡыусыларын республикабыҙҙағы, илебеҙҙәге демографик хәл дә ҡыҙыҡһындыра...*

— Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, XX быуат аҙағында ялған демократия уйындары, иҡтисади эксперименттар менән мауығыу һөҙөмтәһендә дәүләттең төп нигеҙен тәшкил иткән демографик процесс иғтибарҙан ситтә ҡалды, Рәсәй демографик һәләкәт алдына баҫты: әлеге ваҡытта Рәсәйҙә үлем осрағы тыуыуға ҡарағанда 2 тапҡырға күберәк. Был хәл иһә әлеге көндә эшләп йөрөгән, ә XXI быуатта хаҡлы ялға сығасаҡ миллионлаған кеше өсөн үтә хәүефле, сөнки эшкә һәләтле халыҡ һаны тәбиғи тормош эшмәкәрлеге шарттарын тыуҙырыу өсөн етмәйәсәк.

1992 йылда Рәсәйҙә тыныс осорҙа тәүге тапҡыр балалар тыуыу һаны үлгән кешеләр һанынан кәм булды. Ә 1994 йылда иһә үлгәндәр өсөн табуттар балалар арбаһында ҡарағанда 1 миллионға күберәк талап ителде.

1999 йыл демографик планда беҙҙең республика өсөн дә еңел булманы. Әлбиттә, Рәсәй менән сағыштырғанда беҙҙә хәлдәр байтаҡҡа яҡшыраҡ. Шулай ҙа 2000 йыл һөҙөмтәләре беҙҙе борсой: 1999 йыл менән сағыштырғанда балалар тыуыу һаны 355-кә кәмегән, ә үлем осрағы 799-ға артҡан. Әбйәлил, Бөрйән, Ейәнсура, Ҡыйғы, Салауат, Хәйбулла районларында һәм Баймаҡ, Ағиҙел, Нефтекама, Межгорье ҡалаларында ғына халыҡ һаны артыу кимәле тотороҡло, ә башҡа ҡала һәм районларҙа, киреһенсә, үлем осраҡтары арта.

Тыуымға килгәндә, уҙған йыл республикала бер көндә уртаса 114 бала тыуған. Шуны ла билдәләп үтеү урынлы, һәр яңы тыуған баланың икенсеһе — ғаиләләге беренсе бала. Икенсе бала тыуыу осрағы 2 тапҡырға, өсөнсөһө — 5, дүртенсеһе — 13 тапҡырға кәмегән.

Тыуыу һәм үлем осраҡтары араһында айырма айырыуса Әлшәй, Әбйәлил, Йылайыр, Илеш районларында, Октябрьский һәм Салауат ҡалаларында ҙур.

— *Идаралыҡта теркәлгән акттар нигеҙендә ошо борсоулы хәлдең сәбәптәрен асыҡлап китһәгеҙ ине.*

— Төп сәбәп иң элек иҡтисади ҡыйынлыҡтарға бәйле. Үрҙә әйтелгәнсә, күп ғаиләләр 1-2 бала үҫтереү менән сикләнә, 3-4 бала үҫтереү өсөн мөмкинлектәр юҡ, тип иҫәпләй.

Икенсенән, йәштәр араһында өйләнмәй йөрөүселәр, айырыуса егеттәр, күп. Бындай хәл ауыл ерҙәрендә йыш күҙәтелә. Егеттәр һәм ҡыҙҙарҙың никах теркәмәйенсә йәшәүҙәре хаҡында ла әйтергә кәрәк. Бындай ғаиләләр бөгөн бар, иртәгә юҡ. ЗАГС-та теркәлгән никахтар ныҡлы, берҙәм ғаиләнең нигеҙе ул. Тап ошо ғаиләләрҙә киләсәктә матур ҡыҙҙар, аҫыл егеттәр үҫәсәк.

Әлбиттә, бала тыуыу һанының артыуына фатир мәсьәләһе лә ҡамасаулай. Сөнки йәш ғаиләләрҙең күбеһе ҡала ерҙәрендә дөйөм ятаҡтарҙа көн күрә. Ә дөйөм ятаҡ шарттарында күп балалы ғаилә өсөн мөмкинлектәр сикләнгән.

Ауылда йәш ғаиләләргә йорт төҙөү өсөн мөмкинлектәр бар, хөкүмәт уларға ссуда бирә. Был йәһәттән мин ҡалала йәшәгән йәштәргә йорт төҙөү мөмкинлектәрен киңәйтергә кәрәк тип иҫәпләйем. Ҡала ситендә баҡса йорто түгел, ә ҡышын да, йәйен дә йәшәрлек йорт һалыу ҡулайлы. Мөмкинлек, рөхсәт булһа, ҙур ҡалалар эргәһендә бына тигән ҡасабалар ҡалҡып сығыр һәм бик күптәрҙең торлаҡ мәсьәләһе хәл ителер ине. Был иһә халыҡ һанын арттырыуға булышлыҡ итер тип уйлайым.

— *Ә иҡтисади ҡыйынлыҡтар ҡамасауламаҫмы?*

— Иҡтисад ҡыйынлыҡтарына һылтаныу урынлы түгел. Тарихтан белеүебеҙсә, һуғыштан һуңғы йылдарҙа йәшәү һис тә еңелдән булмаған, ә бына тыуыу һаны үлем осрағынан 5-6 тапҡырға артҡан. Мине ир-егеттәр араһында үлем осраҡтарының күплеге айырыуса борсой. Эшкә һәләтле ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда 4 тапҡырға күберәк үлә. 1999 йылда үлгән ирҙәрҙең 41 проценты 60 йәшкә тиклемге кешеләр, ә 50 йәшкә тиклемгеләр араһында ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда өс тапҡырға күберәк. Йөрәк һәм ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан үлеүселәр айырыуса күп.

Унан ҡала ағыуланып, эскелектән, үҙ-үҙенә ҡул һалып үлеүселәр икенсе урынды биләй. Әйтәйек, 2000 йылдың 6 айы эсендә генә 1459 кеше үҙ-үҙенә ҡул һалған. Ҡыҫҡаһы, дәүләт статистика комитеты фаразлауынса, 2016 йылға Рәсәй халҡының һаны 138 миллионға ҡаласаҡ (йәғни 7 миллион кешегә кәмейәсәк).

*— Республикабыҙҙа демографик хәлде яҡшыртыу йәһәтенән ниҙәр эшләнә?*

— Беҙҙең республикала ғына 5 һәм унан да күберәк бала табып үҫтергән әсәләргә «Әсәлек даны» миҙалы биреү тураһында махсус Указ ҡабул ителгән. Был үҙе үк йәмғиәттә, ғаиләлә әсә кешенең ролен данлау ул. Бынан тыш, 2000 йылда ғаиләлә 4-се бала тыуғанда — 1000 һум, 5-се балаға — 1,5 мең һум пособие түләү тураһында Указ сыҡты. Республикабыҙҙың суверенитеты көнө, йәғни 11 октябрҙә тыуған балаларға махсус бүләктәр бирелә, уларға айырыуса тантаналы шарттарҙа тыуыу тураһында таныҡлыҡ тапшырыла. Бынан тыш, һәр район хакимиәте үҙе төрлө дәртләндереү сараларын билдәләй. Әсә йылы тип иғлан ителгән 2001 йылда бындай саралар тағы ла күберәк буласаҡ. Һәр ауылда, ҡалала демографик хәлде яҡшыртыу программаһы әҙерләнә. Республика күләмендә бала тыуыуҙы өс тапҡырға арттырыу өсөн бөтә мөмкинлектәрҙе булдырыуға иғтибар йүнәлтелгән. Ғөмүмән, Рәсәйҙә лә, Башҡортостанда ла демографик хәлде, ҡатын-ҡыҙ әсәнең тормош-көнкүрешен өйрәнеү буйынса махсус ойошма булдырыу зарур. Тик шул саҡта ғына әсә кеше үҙенә бирелгән бөйөк исемде аҡларлыҡ бейеклеккә күтәреләсәк.

Йөҙҙән ашыу милләт йәшәгән Башҡортостаныбыҙҙың ҡатын-ҡыҙҙарының барыһы ла ҡайҙа тыуыуы, кем булып эшләүе, ниндәй милләт вәкиле булыуына ҡарамаҫтан, үҙенең бар булмышын бала тәрбиәләүгә арнай икән, ул ихтирамға, иғтибарға лайыҡ.

*— Мосолмандарҙа элек-электән ир кеше ғаилә тәрәге булған, уның һүҙе закон рәүешендә кабул ителгән. Әлеге вакытта ошо хәл кире якка үҙгәрә...*

— Дөрөҫ, әлеге заманда күпселек ғаиләләрҙе, айырыуса ауыл ерендә, ҡатын-ҡыҙ тота. Завод, фабрикаларҙың күпләп ябылыуы һөҙөмтәһендә байтаҡ ир-егеттәр эшһеҙ тороп ҡалды. Ғүмер буйы эштә ҡайнаған, үҙен ғаилә терәге итеп тойоп өйрәнгән кеше өсөн был хәл үтә ҡыйын. Шуға күрә уларҙың байтағы эскелеккә һалыша, төрлө насар йоғонтоға бирелә. Ир-егеттәр үҙҙәренең эшһеҙ ҡалыуынан, ғаиләһен тәьмин итә алмауҙарына ғәрләнеп, үҙ-үҙенә ҡул һалыуға тиклем барып етә.

Нисек кенә булмаһын, ғаилә башлығы ир кеше булырға тейеш, тап ошондай ғаилә генә ныҡлы була. Аҡыллы ҡатын-ҡыҙ ошоно аңлап тормош көтә.

Никахтары теркәлмәгән ғаиләләр һанының, ошо нигеҙҙә никахһыҙ тыуған балалар һаны артыуы ла проблема булып тора. Республикала һәр дүртенсе бала тулы булмаған ғаиләлә тыуа. Һуңғы 10 йылда никах теркәү нисбәте ике тапҡырға кәмене. Был хәл беҙҙә бик борсой.

*— 2001 йыл Әсә йылы тип иғлан ителеү айканлы һеҙҙең идаралык ниндәй изге эштәр аткарырға ниәтләй?*

— Беҙҙең төп маҡсат — ғаиләләр менән эшләү, республикабыҙҙың ғаилә кодексына ярашлы саралар үткәреү, йәмғиәтебеҙҙә әсә кешенең статусын, ролен күтәреү. Былтыр «2000 йыл балаһы» тигән акция үтте. Быйыл иһә «XXI быуат балаһы» тигән яңы акция иғлан ителде. Халҡыбыҙҙа әсә булыу, бала тыуыу менән бәйле матур-матур изге йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр йәшәп килә. Ошо ыңғай йолаларҙы тергеҙеү, дауам итеүҙе лә үҙебеҙҙең бурыс, тип иҫәпләйем. Был йәһәттән иң яҡшы сараларға сценарийҙар конкурсы иғлан ителде. Унда еңеп сыҡҡан сценарий өлгөләре бөтә загс бүлектәренә, никах йорттарына таратыласаҡ. Үҙҙәрен ыңғай яҡтан күрһәтергә өлгөргән Йәш ғаилә мәктәптәренең, ғаиләгә, балаларға, йәштәргә социаль-психологик ярҙам күрһәтеү үҙәктәре, Ғаиләне планлаштырыу кабинеттары, «Ышаныс телефондары»ның эшен артабан йәнләндереү ҙә әсә кешенең абруйын күтәреүгә булышлыҡ итер, тип уйлайым. «Әсәйҙәр көнө»н билдәләү ҙә быйыл айырыуса юғары кимәлдә үтергә тейеш.

Ҡыҫҡаһы, кешегә ғүмер биреүсе әсә хаҡында хәстәрлек күреү, уның йәмғиәттәге ролен баһалау — киләсәк хаҡында хәстәрлек күреү ул.

*Әңгәмәне*
*Зөһрә Алтынбаева алып барҙы.*